TDD/JofEL • Summer/Winter • Volume 3, Issue 4-5, 2014

Ф. А. Нәҙершина
РФА ӨҒҮ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты



# МӘҒӘНӘЛӘШ[1] МӘҠӘЛДӘР ҺӘМ ӘЙТЕМДӘР
## ANLAMDAŞ ATASÖZLERİ VE DEYİMLER



Халыҡ ижадының башҡа жанрҙарынан айырмалы рәүештә, мәҡәлдәр теге йәки был фекерҙе көсәйтеү, раçлау йә булмаһа кире ҡағыу өсөн телмәр ағышына индерелә. Уларҙы ҡулланыу фекергә ҡеүәт, телмәргә йәм өçтәй. Шуға ла боронғолар, мәҡәлде ололап, уның тормоштағы әһәмиәтен билдәләп, «Йөҙ күрке - һаҡал, һүҙ күрке- мәҡәл», «Мәҡәлле һүҙ - аҡыллы һүҙ» тип әйтеп ҡалдырған. Мәҡәл тик һөйләү ағышында ғына үҙенең бөтә тәрәнлеген асып, үҙенсәлекле яҡтылығын сәсеп бирә.

Ҡулланыштары, йәшәү рәүештәре яғынан мәҡәлдәргә әйтемдәр бик яҡын тора. Дөйөмләштерелгән фекергә ҡоролған, күпселектә өгөт-нәсихәт итеүсе мәҡәлдәрҙән айырмалы рәүештә, «әйтемдәр теге йәки был күренеште образлы һәм ситләтеп атап биреү менән генә сикләнәләр».[2]

Сағыштырайыҡ:

«Өйөң тар булһа ла, күңелең киң булһын» – был мәҡәл. Ул дөйөмләштерелгән бер фекер әйтә, күңел киңлегенә, ҡунаҡсыллыҡҡа өндәй, йәғни өгөт-нәсихәт бирә, өйрәтә. Ә бына «Өйөм тар булһа ла, күңелем киң» тигәне – әйтем, сөнки бында дөйөм төшөнсә, өгөт-нәсихәт юҡ, ул ниндәйҙер бер айырым кешенең айырым осраҡтағы ҡунаҡсыллығын ғына күрһәтеп тора. «Төтөндән ҡурҡып, утҡа төшкән» – теге йәки был кешенең тәғәйен бер осраҡта уңайһыҙ хәлгә, бәләгә ҡалыуына ҡарата әйтелгән әйтем. «Төтөндән ҡурҡып утҡа төшмә» – бәләкәй, артыҡ ҡурҡыныусыңыҙ бәләнән һаҡланыу менән мауығып, бәлә-ҡазаның ҙурын абайламай, күрмәй ҡалма тигән фекерҙе үткәреүсе мәҡәл. «Береһе тарта мәғрипкә, береһе тарта мәшриҡҡә», «Бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта», «Бер ҡышҡа ҡуян сарығы ла сыҙаған», «Берәүҙә баш ҡайғыһы, берәүҙә бүрек ҡайғыһы», «Бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына» – был миçалдарҙа ла дөйөмләштерелгән фекер юҡ, ә билдәле бер осраҡҡа ҡарата образлы фекерләү, мөнәсәбәт белдереү генә бар.

Хәҙерге көндә лә киң ҡулланылып, телебеҙгә йәм, фекеребеҙгә ҡеүәт биреүсе йөҙәрләгән, меңәрләгән мәҡәлдәребеҙ – төрлө осор, төрлө быуын кешеләренең поэтик ижад емеше ул. Тәрән һәм киң мәғәнә, юғары образлылыҡ, дидактик йөкмәтке уларҙың оҙон ғүмерлелегенә сәбәпсе булған.

Башҡорт халҡының күп кенә мәҡәлдәре башҡа халыҡтарҙың мәҡәлдәре менән мәғәнәүи һәм формаһы яғынан тап килә. Айырыуса ҡәрҙәш төрки халыҡтарының паремик ижады менән оҡшашлыҡ, яҡынлыҡ ҙур. Мәҫәлән, башҡорт һәм төрөк мәҡәлдәрен сағыштырма өйрәнеү нигеҙендә төрөк телсеһе Исмәт Бинер ике халыҡтың мәҡәлдәре араһында тел һәм стиль үҙенсәлектәре йәһәтенән байтаҡ оҡшаш һыҙаттар булғанлығын асыҡланы. [3] Эквивалентлыҡ проблемаһын үҙәккә ҡуйып тикшергәндә, был ике халыҡтың мәҡәл һәм әйтемдәре араһындағы мәғәнәүи (семантик) оҡшашлыҡтарҙы ла күреүе ауыр түгел, сөнки мәғәнәләшлелек төрлө халыҡтарҙың мәҡәл һәм әйтемдәре өсөн хас, универсаль күренеш.

Мәғәнәләш мәҡәлдәрҙең нигеҙҙә өс төрө (тибы) бар. Беренсеһе – мәғәнәләре һәм формалары буйынса бер иш, йәғни һүҙмә-һүҙ тап килеп торған берәмектәр икенсе тибы – лексик яҡтан өлөшләтә айырмалыҡтары булған мәҡәл һәм әйтемдәр; өсөнсө тибы – мәғәнәләре яҡын, әммә лексик берәмектәре төрлөсә.



Төрки халыҡтарының мәҡәл-әйтемдәре араһындағы оҡшашлыҡ мәсьәләһе ғалимдарҙы күптән ҡыҙыҡһындыра. Мәҫәлән, туғандаш һәм күрше булған татар халҡының мәҡәлдәре менән башҡорт мәҡәлдәренең дөйөмлөлөгөн билдәләп, проф. Ж.Ғ. Кейекбаев: «...башҡорт һәм татар телдәрендәге мәҡәлдәрҙең күпселеге ике телдең уртаҡ фразеологик фонды һанала»,[4] – тип яҙҙы: Татар һәм башҡорт мәҡәлдәре араһындағы оҡшашлыҡ һәм үҙенсәлектәр мәсьәләһе Фәнүзә Нәҙершинаның Ҡазанда сыҡҡан бер мәҡәләһендә лә[5] сағылды, бер үк ваҡытта автор төрки телле башҡа халыҡтарҙың афористик ижадында эквивалент мәҡәлдәрҙең йыш осрауын билдәләп (бигерәк тә ҡаҙаҡ мәҡәлдәре тәңгәлендә), был күренештең тәрәндәге тамырҙары һәм быуаттар һуҙымында барған төрлө характерҙағы бәйләнештәр хаҡында әйтеп үтте. Башҡорт һәм ҡаҙаҡ мәҡәлдәре араһындағы ҙур яҡынлыҡ иһә бик тә тәбиғи, сөнки, беренсенән, ҡаҙаҡтар менән башҡорттар быуаттар буйы бик яҡын күрше булып, үҙ-ара аралашып йәшәнеләр; икенсенән, үҙенең лексик составы яғынан башҡорт теле, ҡаҙаҡ теле һымаҡ, көнсығыш төрки телдәре төркөмөнә ҡарай.

Бер иш мәҡәлдәргә ҡайһы бер үрнәктәр –

| *башҡорт телендә:* | *ҡаҙаҡта:* |
|---|---|
| Ата-инәңә ни ҡылһаң, | Атаңа не ҡылсаң, |
| алдыңа шул килер. | алдыңа сол келер. |
| Ир бала – ата-анаға таяу, | Ер бала – ата-анаға таяу, |
| Ҡыҙ бала – өйгә яҡҡан буяу. | Ҡыз бала – үйге жаҡҡан бояу. |
| Ҡыҙы барҙың – наҙы бар[6]. | Ҡызы бардың – назы бар[7]. |

Башҡорт мәҡәл һәм әйтемдәренең башҡа төрки телле халыҡтарҙың мәҡәлдәре менән уртаҡлығын күрһәтеүсе миҫалдар ҙа аҙ түгел. Мәҫәлән: «Аҡыл йәштә түгел, башта» - был башҡорт телендә киң таралған, һәр кемгә билдәле булған боронғо мәҡәл (беҙ уны М. Ҡашғари хеҙмәтендә осратабыҙ). Хәҙерге төрөкмән телендә ул: «Аҡыл яшда болмаз, башда болар»[8], әзербайжан телендә: «Ағыл башда олар, яшда олмаз»[9] рәүешендә яңғырай. Башҡорт телендәге «Тайы ат булғансы, эйәһе эт булыр» тигән мәҡәл төрөкмәндәрҙә: «Тайы ат болянча, эйеси ит болар»; әзербайжан телендә: «Дай от олунча, ейәси мат олар» формаһында ҡалыплашҡан. «Ауыл эте ала булһа ла, бүре килгәндә берегер», «Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә», «Аҡыллының ҡәҙере ахмаҡ янында беленер» кеүек башҡорт халыҡ мәҡәлдәре үзбәк телендә түбәндәгесә: «Овул ити ола булса, бури келса бирикар», «Халҡ сузи – хаҡ суз», «Аҡллининг ҡадри ахмоҡнинг олдида билинар».[10]




Күренеүенсә, килтерелгән миҫалдар бер-береһе менән һүҙмә-һүҙ тиерлек тап килә, уларҙың мәғәнәләре, төҙөлөштәре, образдары бер үк тиергә мөмкин. Фәндә ҡәрҙәш халыҡтарҙың, шул иҫәптән төрки халыҡтарының, мәҡәлдәре араһындағы яҡынлыҡ нигеҙҙә тарихи-генетик уртаҡлыҡ менән аңлатыла. Шул уҡ ваҡытта ҡәрҙәш милләттәрҙең ижад оҡшашлығында типологик шарттар һәм алынмасылыҡ (заимствование) кеүек факторҙарҙың роле лә күҙ уңынан сығарылмай.

Башҡорт мәҡәлдәре менән бер иш мәғәнәле текстарҙы йыш ҡына тел системалары бөтөнләй башҡа, ҡәрҙәш булмаған халыҡтарҙың ижадында ла осратырға мөмкин. Мәҫәлән, башҡорттоң «Сир ботлап керһә лә, мыҫҡаллап сыға» тигән мәҡәле руста - «Болезнь приходит пудами, а уходит золотниками», французда Les mäladies viennent à cheval sen retournent à pied, немецта Kranheiten kommen zu pfegde und gehen zu Fuss wieder fort[11] рәүешендә яңғырай. «Ҡарға күҙен ҡарға суҡымай», «Ҡул ҡулды йыуа», «Әйткән һүҙ – атҡан уҡ», «Ни сәсһәң, шуны урырһың» – был мәҡәл, әйтемдәр күп халыҡтар өсөн дөйөм булған йәки дөйөм кешелек характерындағы мәҡәлдәр иҫәпләнә. Улар, мәҫәлән, боронғо римляндарҙа, йәғни латин телендә лә, булған[12]. Былдай әҫәрҙәрҙең дөйөмләләгән ике сәбәп менән аңлатырға мөмкин: беренсеһе - тарихи-типологик шарттарҙың оҡшашлығы, йәғни ижтимағы-экономик формациялары, тормош-көнкүреш шарттары яғынан оҡшаш, йә бер үк типтағы ижтимағи формациялар үткән халыҡтарҙа бер үк типтағы мәҡәлдәр тыуыу. Был йәһәттән П. Лафаргтың фекерен хәтергә төшөрөү урынлы: «... Бер-береһенән алыҫ торған төрлө халыҡтарҙа оҡшаш йырҙар, хикәйәттәр, йолалар табыла. Европаның таш быуаттағы ҡырағай кешеләре бысаҡ, балта кеүек таш ҡоралдарын Австралия кешеләренеке һымаҡ итеп яһаған. Материалдың оҡшашлығы кешене тегендә лә, бында ла уны бер төрлө итеп эшкәртеүгә килтергән. Шуның шикелле бер үк нәмәнән тәьҫир алған кешеләр, шул нәмәне оҡшаш йырҙар, хикәйәттәр, йолалар аша бирә».[13]

Рус мәҡәлдәрен өйрәнгән XIX быуат ғалимы И. М. Снегиревтың ҡарашы ла асылда шуға ҡайтып ҡала: «Мәҡәлдәр бөтә халыҡтарҙа ла мәғәнә яғынан бик оҡшаш. Ләкин был оҡшашлыҡ бер халыҡтың икенсе халыҡҡа фекер биреүенән түгел, ә тотош кешелек донъяһының уй-тойғоһона бер үк төрлө фекер һеңешкән булыуҙан килә».[14]

Күп осраҡта төҙөлөштәре лә, мәғәнәләре лә тап килгән мәҡәлдәрҙең милли ерлеген тик уларҙағы реалияларға, образдарға ҡарап ҡына аныҡларға мөмкин. Миҫал өсөн башҡорт һәм татар халыҡтарында киң таралған «Бер тарынан бутҡа булмай» тигән ябай ғына бер мәҡәлде алайыҡ. Уның нигеҙендә, күреүегеҙсә, берҙәмлекте хуплау идеяһы ята. Ошо уҡ фекер төрөктәрҙә “Yalnız taş duvar olmaz”, сербтарҙа «Бер имәндән имәнлек булмаҫ», немец халҡында - «Бер сәскәнән таж булмаҫ», финдарҙа - «бер бүрәнә карап (корабль) булмаҫ»[15] кеүек мәҡәлдәр аша әйтеп бирелгән. Уларҙағы образдарға ҡарап, һәр халыҡтың әйләнә-тирәһе, көнкүреше ярайһы уҡ асыҡ төҫмөрләнә.

Алда телгә алынған *алынмасылыҡ,* йәғни халыҡтарҙың төрлө юлдар менән аралашыуы һөҙөмтәһендә ҡайһы бер мәҡәлдәрҙең бер халыҡтан икенсе халыҡҡа күсеү осраҡтарының ҡәрҙәш булмаған этностарҙың ижадында ла урын алыуы хаҡында төрлө ил ғалимдарының хеҙмәттәрендә телгә алына. Был күренеш беҙҙең паремик ижадты ла ситләп үтмәгән, сөнки башҡорт халҡы элек-электән Урта Азия (Бохара, Хиуа, Ургенч) менән сауҙа бәйләнештәре алып барған, Урта Азиянан Уралға һәм Уралдан Урта Азияға каруандар йөрөп торған. Ә Урта Азия халыҡтары үҙ сиратында Иран, Ҡытай, Тибет менән мәҙәниәт һәм сауҙа мөнәсәбәтендә булғандар. Һуңғараҡ, атап әйткәндә, Башҡортостан XVI быуатта Рус дәүләтенә ҡушылғас, башҡорттар рус халҡы менән ныҡлап аралаша башлайҙар. Тәүгерәк осорҙа был аралашыу башҡорт атлыларының рус армияһы составында хеҙмәт итеүе, бергә яу сабыуы рәүешендә йәшәгән. Рус армияһы сафында Рәсәй азатлығын һаҡлап яу сапҡан башҡорт атлыларының эҙҙәре Һары диңгеҙ ярҙарынан алып Балтик һәм Сена ярҙарына тиклем һибелгән. Һуңғараҡ быңдай аралашыу көндәлек тормоштағы ғәҙәти бер хәлгә әйләнә. Ошо аралашыу процесында территориаль яҡтан бик алыҫ йәшәгән халыҡтарҙың телендәге мәҡәл һәм әйтемдәрҙең дә икенсе халыҡ теленә килеп инеү мөмкинлеге бар. Тик бында шуны иҫтә тоторға кәрәк, ситтән ингән мәҡәлдәр теге йәки был халыҡтың ижадында артыҡ киң урын ала алмаған булырға тейеш, сөнки тәржемә, хатта уның иң яҡшы тигәне лә, мәҡәлдең бөтә нескәлектәрен, нәфислеген биреп бөтөрә алмай.

Донъя халыҡтары менән киң аралашыу мөмкинлеге булған хәҙерге заман шарттарында төрлө этностарҙың рухи ҡомартҡыларына, шул иҫәптән башҡорт халыҡ ижадын, тел байлыҡтарын сағыштырма өйрәнеүгә иғтибар көсәйҙе. Атап әйткәндә, тел системалары төрлө булған халыҡтарҙың мәғәнәләш мәҡәл-әйтемдәрен тапҡыр һүҙҙәрен (фразеологизмдарын)[16] өйрәнеү ярайһы уҡ уңышлы аҙымдар яһалды. Тик бында шуны ла әйтергә кәрәк: мәғәнәләш башҡорт һәм рус мәҡәл һәм әйтемдәрен, фразеологизмдарын йыйнау, уларҙы нәшер итеү уҙған йөҙыллыҡтың һуңғы сирегендә башланғайны.[17] XXI быуаттың башында инде “Башҡортса-инглизсә-русса мәғәнәләш мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге” донъя күрҙе[18], тупланған материал һәм ғилми әҙәбиәт нигеҙендә Э.М. Созинованың монографияһы[19] баҫылып сыҡты. Авторҙың сағыштырма тел ғилеме, культурология һәм фольклористика сиктәрендә өйрәнелгән был хеҙмәте эквивалентлыҡ проблемаларын универсаллек һәм уникаллек күренешетәрен төрлө юҫыкта тикшереүе менән (оҡшаш мәҡәлдәрҙең вербаль яҡтан формалашыуы, образдары, синтактик төҙөлөштәре, донъя картинаһының сағылышы) ҙур ҡыҙыҡһыныу уята.




Йыйып ҡына әйткәндә, башҡорт халыҡ мәҡәл һәм әйтемдәрен, тапҡыр һүҙҙәрен (фразеологизмдарын) бүтән халыҡтарҙың афористик иждаы менән сағыштырып өйрәнеү, материалдар баҫтырыу эше дауам итә. Беҙҙең тарафтан әҙерләнеп, донъя күргән русса-башҡортса мәғәнәләш мәҡәлдәр һүҙлеге[1] шуға миҫал. Был һүҙлек башҡорт менән рус халыҡтарының ижадындағы оҡшаш мәҡәл һәм әйтемдәрҙең бер өлөшөн туплаған ҡулланма булып тора. Унда 2000-гә яҡын рус мәҡәл һәм әйтемдәренә башҡорт халыҡ мәҡәл һәм әйтемдәренең аналогтары бирелә, шуның менән бергә йыйынтыҡтың икенсе өлөшөндә башҡорт мәҡәлдәренең алфавит тәртибендәге күрһәткесе һәм уларға тура килгән төп корпустағы рус берәмектәренең һаны килтерелә. Бер иш йәки яҡынса мәғәнәле мәҡәл, әйтемдәрҙең һаны былар менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Уҡыусыларҙың, бигерәк тә тәржемәселәрҙең ихтыяжын күҙ уңында тотоп, әҙерләнгән материалды нәшер итә тороу маҡсатында донъяға сығарылды беҙҙең “Русса-башҡортса мәғәнәләш мәҡәлдәр һүҙлеге”.

Өҫтәп, шуны ла әйтергә кәрәк: юғары уҡыу йорттарында теге йәки был телдәге материалды нигеҙ итеп алып, уны башҡа телдәр менән сағыштырып өйрәнеү-ярайһы уҡ йыш осраған күренеш. Беҙҙең ҡарашҡа, унда күберәк сит илдәге европа телдәренә иғтибар күберәк бүленә төҫлө. Әлбиттә, был ыңғай тәжрибә. Артабан төрки телле ҡәрҙәш халыҡтарҙың мәғәнәләш мәҡәл һәм әйтемдәрен үҙ-ара сағыштырма өйрәнеүҙе яйға һалыу ҙа артыҡ булмаҫ ине, улай ғына ла түгел, уны хатта паремиологтар өсөн көнүҙәк бурыстарҙың береһе тиергә лә мөмкин.

*Düzenleyen:* Süer Eker

[1] “Мәғәнәләш” һүҙе *эквивалент, эквивалентный* тигәнде аңлата.

[2] Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге / Төҙ. Ким Әхмәтәнов. Өфө, 1965. 245-се б.

[3] *Бинер Исмет.* Особенности языка и стиля поговорок в башкирском и турецком языках: Автореф. дис. канд. филол. наук. Уфа, 2004.

[4] *Кейекбаев Ж.Ғ.* Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы (уҡыу ҡулланмаһы). Өфө, 1966. 236-сы бит.

[5] *Надршина Ф.А.* Адекватные пословицы тюркоязычных народов // Взаимодействие культур народов Поволжья и Приуралья. Казань, 1976. С.102-105.

[6] Башҡорт халыҡ ижады: Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авт. – Фәнүзә Нәҙершина. Өфө, 1980. 152, 164, 174-се бб.

[7] Ҡаҙаҡтың маҡалдары мен мәтелдәр / Жинап ҡурастырған Өтебай Түрманжанов. Алматы, 1959. 97, 102, 106-сы б.

[1] Надршина Ф.А. *Русско-башкирский словарь пословиц-эквивалентов*. Уфа: Китап, 2008. 196 с.

[8] Краткий фразеологический словарь русского и туркменского языков / Сост. А.Анннуров, Г.Кулиева. – Ашхабад, 1963. 134, 137-се биттәр.

[9] Абдулгасым Һусейнзадә. Аталар сөзү. Бакы, 1956. 23, 81-се бб.

[10] Узбек халҡ мәҡоллары / Тузувчилар: Б. Саримсоков, А.Мусаҡулов, М.Мадрахимова. Тошкент, 1981. 22, 24, 68-се бб.

[11] Гольшух И. Пословицы, поговорки и изречения или народная мудрость на трех языках: русском, французском и немецком. Казань, 1888. С.6.

[12] Краткий словарь латинских слов, сокращений и выражений / Сост. В.Н. Куприянова, Н.М. Умнова. Новосибирск, 1961.

[13] Лафарг П. Очерки по истории культуры. М., 1926. 53-сө б.

[14] Снегирев И. Русские в своих пословицах. М., 1831. 4, 5-се бб.

[15] Будаев Ц.Б. Адекватные пословицы и поговорки разных народов. Улан-Удэ, 1962. 83, 84-се бб.

[16] Бында *тапҡыр һүҙ* термин булараҡ фразеологизм мәғәнәһендә тәү башлап беҙҙең тарафтан ҡулланылды – Ф.Н.

[17] Ураҡсин З.Ғ., Нәҙершина Ф.А., Йосопов Х.Ғ. Башҡортса-русса фразеологик һүҙлек. Өфө, 1973; Башҡортса-русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге / Төҙөүсеһе – Ильһам Ғарипов; Яуаплы ред. һәм инеш һүҙ авторы – Фәнүзә Нәҙершина. Өфө, 1994. 168 б.

[18] Башкирско-англо-русский словарь адекватных пословиц и поговорок / Авт.-сост. Надршина Ф.А., Зубаирова [Созинова] Э.М. Авт. Предисловия – Элла Зубаирова. Уфа: Китап, 2002. 160 с.

[19] Созинова Э.М. Общее и специфическое в паремиях-эквивалентах (на материале башкирского, русского и английского языков). Уфа: Гилем, 2010. 204 с.